# Һау-сәләмәт булғың киләме?



*Илдә барған ижтимағи-сәйәси, иктисади яңырыштар кешеләрҙең үҙ һаулығына караштарын төптән үҙгәртеп короуҙы талап итә. Һүҙ бында һаулык һаклау өлкәһендә өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙең береһе булған профилактика хеҙмәте хакында бара. Республикабыҙҙа был йүнәлештә эшләгән төп ойошмаларҙың береһе булған Башкортостан медицина профилактикаһы үҙәгенең баш табибы, медицина фәндәре кандидаты* ***Анфиса Рауил кыҙы РӘХМӘТОВА*** *менән әңгәмәбеҙ был хеҙмәттең үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге хакында.*

— **Анфиса Рауиловна, һеҙ етәкләгән үҙәк ҡасан, нимәгә бәйле ойошторола? Әңгәмәбеҙ башында уның тарихына туҡталайыҡ әле.**

— Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссариаты ҡарамағындағы Санитария белеме биреү йорто 1921 йылдың сентябрендә ойошторола. Уның асылыуына илдәге санитария хәленең ауыр булыуы йоғонто яһай. Тотош илдәге кеүек, ул ваҡытта беҙҙең республикала ла трахома, тиф кеүек йоғошло ауырыуҙар киң тарала. Яңы аяғына баҫып килгән республикаға был хәл ҙур хәүеф менән янай. Республиканың төп халҡын тәшкил иткән эшселәр менән крәҫтиәндәр араһында был ауырыуҙар тураһында мәғлүмәт таратыу маҡсатында беҙҙең хеҙмәт барлыҡҡа килә лә инде. Башҡорт, рус, татар телдәрендә лекциялар уҡыла, был сирҙәр менән көрәшкә саҡырған, уларҙы иҫкәртеүгә йүнәлтелгән махсус китаптар, листовкалар сығарыла.

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда, унан һуңғы йылдарҙа Санитария белеме биреү йорто, башҡа һаулыҡ һаҡлау ойошмалары кеүек, ябай халыҡтың һаулығын нығытыуға, төрлө ауырыуҙар таралыуҙы киҫәтеү өсөн бар көсөн һала. Сәнәғәт предприятиелары цехтарында, госпиталдәрҙә, белем биреү йорттарында, дөйөм ятаҡтарҙа иҫкәртеү, пропаганда эше киң йәйелдерелә.

1962 йылда йортҡа республика статусы биреү Башҡортостандың ҡала һәм райондарында бындай йүнәлештә эшләйәсәк үҙәктәр асылыуға булышлыҡ итә. Салауат (1962), Стәрлетамаҡ (1966), Өфө (1969), Туймазы (1979), Октябрьский (1984), Нефтекама (1983), Ишембай (1991) ҡалаларында ла санитария белеме биреү йорттары булдырыла. Йылдар дауамында эш алымдары үҙгәреп торһа ла, Башҡортостан медицина профилактикаһы үҙәге заман һулышын тойған, уға яраҡлашҡан, республиканың һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге көнүҙәк мәсьәләләрҙе сағылдырған, халыҡтың һаулығын ҡайғыртҡан, хәстәрләгән тәүге ойошма булып ҡала.

Башҡортостанда 1996 йылда Һаулыҡ һаҡлау министрлығы Рәсәйҙә беренселәрҙән булып “Башҡортостан Республикаһында медицина профилактикаһын киңәйтеү саралары тураһында” ҡарар ҡабул итте. Башҡа төбәктәрҙә бындай ойошмаларҙы яңынан тергеҙергә тура килде, ә беҙҙә был ҡарар профилактика хеҙмәтен көсәйтергә ярҙам итте, сөнки ул эшләп килә ине.

— **Бөгөнгө көндә иҫкәртеү хеҙмәтенең эше ниндәй дәрәжәлә ҡуйылған?**

— Һуңғы йылдарҙа Башҡортостан медицина профилактикаһы үҙәге айырыуса йәш быуын араһында сәләмәт йәшәү рәүешен алып барыуға ныҡлы иғтибар бүлә. Сөнки балаларҙың сәләмәтлеге кимәле милләттең киләсәгендә сағылыш табасаҡ. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы эшмәкәрлегендә төп йүнәлештәрҙең береһе — мәктәп уҡыусыларына гигиена тәрбиәһе биреү. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, профилактика эше яңы иҡтисади шарттарҙа, баҙар мөнәсәбәттәренә күсеү осоронда күҙ уңынан төшөп ҡалды. Әммә тормош үҙенекен итә, иҫкәртеү эшенең кәрәклеге йәмғиәттә барған төрлө үҙгәрештәр менән күп тапҡырҙар иҫбатланды.

Иҫкәртеү хеҙмәте эшләп килеү дәүерендә, Башҡортостанда йәшәүсе төрлө милләт кешеләренең үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, ата-бабаларыбыҙ тарафынан киң файҙаланылған, һаулыҡты һаҡларға ярҙам иткән нәтижәле саралар тәҡдим ителә, йәмғиәттә уларҙы киңерәк таратыу юлдары эҙләнелә. Әлеге ваҡытта үҙәктәге эшсе төркөм Көнбайышта профилактика эшендә ҡулланылған алдынғы тәжрибәне Башҡортостан шарттарына яраҡлаштырыу менән шөғөлләнә. Бынан тыш, үҙәк республика халҡын сезонлы инфекцияларҙан һаҡлау менән шөғөлләнә. Бының өсөн махсус баҫмалар сығарыла. Мәҫәлән, гепатит, грипп кеүек айырыуса хәүефле ауырыуҙар хаҡында мәғлүмәт таратабыҙ. Нәшриәт

*Башкортостан медицина профилактикаһы үҙәге*



комплексы булыуы ла эшебеҙҙе күпкә еңеләйтә. “Һаулыҡ мәктәптәре”нең эшен әүҙемләштереү мотлаҡ.

Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһының мәғлүмәттәренә ҡарағанда, йәмғиәт сәләмәтлеге 49—51 процентҡа кешеләрҙең йәшәү рәүешенә бәйле. Ошоға ярашлы, дөйөм һаулыҡ һаҡлау мәҙәниәтен тәрбиәләү, сәләмәт тормош алып барыуҙы булдырыу — хәҙерге заманда кешелектең йәшәүенең төп маҡсаттарының береһе. Ә беҙ был изге эштә ярҙам итәбеҙ.

— **Анфиса Рауиловна, һеҙ етәкләгән ойошмаға ҡала һәм райондарҙағы үҙәктәр, профилактика бүлмәләре ҡарай. Уларҙың эше нисек ойошторолған?**

— Әйтеп үтеүемсә, Салауат, Стәрлетамаҡ, Өфө, Туймазы, Нефтекама, Октябрьский, Ишембай ҡалаларында, республиканың барлыҡ районларында профилактика үҙәктәре, бүлмәләре уңышлы эшләп килә. Беҙҙең ойошма Һаулыҡ һаҡлау министрлығының төп медицина профилактикаһы үҙәге булғанлыҡтан, уларҙың эшмәкәрлеге туранан-тура беҙгә ҡарай. Башҡортостан медицина профилактикаһы үҙәге, барлыҡ төр ауырыуҙарға ҡаршы пропаганда эшен ойоштороу менән, уны тейешле йүнәлештә алып барырға ярҙам итә.

— **Рәсәйҙә 2006 йылдан “Һаулыҡ” өҫтөнлөклө милли проекты эшләй башланы. Билдәле булыуынса, уның иң мөһим бурыстарының береһе — ауырыуҙарҙы иҫкәртеү. Тимәк, был пункт һеҙгә лә ҡағыла. Был проектты тормошҡа ашырыуҙа нисек ҡатнашаһығыҙ?**

— Башҡортостан медицина профилактикаһы үҙәге әүҙем рәүештә республиканың киң мәғлүмәт сараларында был проектты тормошҡа ашырыуҙы яҡтырта. Тағы ла “Һаулыҡ” өҫтөнлөклө милли проекты вакцинация, бушлай иммунизация үткәреүҙе, өҫтәмә диспансерлаштырыуҙы үҙ эсенә ала. Беҙҙең белгестәр республиканың ҡала һәм райондарында был йүнәлештәрҙең бойомға ашырылыуын тикшереп тора. Мәҫәлән, бюджет өлкәһендә эшләүселәрҙең һаулығын тикшереү ниндәй һөҙөмтәләргә килтергән, уның буйынса тейешле саралар күреләме. Шулай уҡ айырыуса хәүефле һанал-ған В гепатиты, полиемиелит, ҡыҙылса кеүек ауырыуҙарға ҡаршы ваҡытында иммунизация үткәреүҙе даими рәүештә контролдә тотабыҙ.

— **Анфиса Рауиловна, һеҙ, ауырыуҙарҙы иҫкәртеү үҙәге етәксеһе булараҡ, журнал уҡыусыларына ниндәй теләктәр әйтер инегеҙ?**

— Һаулыҡты юғалтыу өсөн күп кәрәкмәй, уны һаҡлау көндәлек эш икәнен онотторға ярамай. Ә бына яңынан ҡайтарыу ҙур проблема, һаулыҡтың бер ниндәй ҙә аҡсаға һатып алалмаҫлыҡ байлыҡ икәнен күптән аңларға кәрәк. Йәштән үк тәмәке тартып, һыра һемереп йөрөгән кешенең һаулығы йылдар үтеү менән әллә ни маҡтанырлыҡ булмаясаҡ. Мәктәптә белем алған ваҡыттан уҡ балаларҙа үҙ һаулыҡтарына яуаплыраҡ ҡарауҙы тәрбиәләргә кәрәк. Нимә генә булһа ла, тыныс булып ҡала белегеҙ. Һаулыҡтың ҙур байлыҡ икәнен онотмағыҙ! Һау-сәләмәт булыр өсөн нимә эшләргә, тигән һорауға мин: ауырыуҙарҙы иҫкәртеү менән шөғөлләнергә, тип яуап бирәм.

*Гөлсәсәк ХӘЙБРАХМАНОВА әңгәмәләште.*